Башҡорт телен һәм милләтебеҙҙе һаҡлап ҡалыу һәм артабан үҫтереүҙең мөһим шарттары

Кумертау ҡалаһы Республика политехника лицей-инртернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Хәлилов Азат Насретдин улының
КОНЦЕПЦИЯҺЫ

Алһүҙ

- **Башҡорт теле - быуаттар буйы ата-бабаларыбыҙ һаҡлап килгән тел ул. Уны һаҡлау һәр башҡорттоң бурысы. Һуңғы ваҡыттарҙа башҡорт теле буйынса ығы-зығылар күбәйҙе. Былар барыһы ла бөтәбеҙҙең дә вайымһыҙлығынан далыр. Телде яҡлау өсөн үткән йыл митингыға ла йыйылды халыҡ**

Алтарих

- Вайымһыҙлыҡ йөҙ йыл элек башланғандыр тип уйлайым. Бынан йөҙ йылдар самаһы элек башҡорт теленә Дәүләт теле статусы биргән саҡта, әҙәби тел һайлау була. Ошонда башлана беренсе вайымһыҙлыҡ хатаһы. Унда ниңәлер көньяҡ башҡорт теле генә алына. Төньяҡ башҡорт телендә һөйләшкән милләттәштәребеҙ ситтә ҡала. Уҡытыу әҙәби телдә башлана. Әлбиттә, ул ваҡыттағы комиссия алдағы осорҙарҙа үҙгәртеү булыу мөмкин тигән мөмкинселек ҡалдырған. Тик совет властында шәхес культы башланыу сәбәпле, был оҙаҡ йылдарғаса ҡала килә. Республикала партияның беренсе секретаре Миҙхәт Закир улы Шәкиров эшләгән осорҙа был һорау шаҡтай күтәреләә. Тимәк ил етәкселеге был юҫыҡта иркенлек биргәндер. Республикала милли мәсьәлне этәреүсе зыялыларыбыҙ булған. (Әммә, шул уҡ ваҡытта, М.З. Шакиров тарафынан уҡ улар эҙәрлекләнгән). СССР-ҙың милләтәр советы булған. 1990 йылдарҙан һуң матбуғат баҫмаларында ике теллелек мәсьәлһе күтәрелеп сыҡҡайны, күп кенә зыялыларыбыҙ ҡаршы сыҡты.

Көнүҙәк мәсьәлә

- ***Бөгөнгө көндә милли үҙаңдың аҫҡа тәгәрәүе- иң беренсе вайымһыҙлыҡ***
- ***Икенсеһе, әлбиттә милли аҙсылыҡ***
- **Әгәр ҙә төньяҡ башҡорттарын да милли үҙаңына ҡайтара алһаҡ, беҙ милли аҙсылыҡтан сығабыҙ. Ул саҡта ҡолас киреп телебеҙ өсөн көрәшә алыр инек**

Көрәш юлдарының беренсеhe

- Төньяҡ диалектҡа иғтибар биреү. Уларға көслөк менән әҙәби телде өйрәтеүҙе йомшартыу
- Туған тел булараҡ төньяҡ диалектта hөйләшкәнсә әсбап китаптар баҫтырыу, уҡытыу программалары төҙөү
- Шул уҡ ваҡытта дәүләт теле булараҡ, әҙәби башҡорт телен уҡытыуҙы ла дауам итеү
- Ул райондарҙа яйлап район гәзиттәрен дә әҙәби телгә күсереү

Көрәш юлының икенсеһе

- Маңҡортлашыуға ҡаршы көрәш! Әлбиттә, урыҫ телен дә уҡытыу кәрәк. Беҙ ниндәй илдә йәшәгәнебеҙҙе лә онотмайыҡ. Беҙҙең ултырып барған карап - Рәсәй дәүләте бар. Ошо карапта ултырғас, беҙ ошо карап закондарына буйһонорға бурыслыбыҙ.
- Балалар өйҙә башҡорт телендә тәрбиә алырға тейеш. Уның өсөн мөмкинселектәр тыйылмаған.
- Тел буйынса комиссияларҙың эшләүен беренсе урынға ҡуйыу һәм Республика кимәлендә сығарылған телде һаҡлау тураһындағы закондарҙы үтәргә мәжбүр итеү. (Хәҙерге көндә алтаҡталар, юл таҡталары, күрһәткестәр, Республика Законына ярашлы ике телдә яҙылырға тейеш булһа ла, күбеһенсә бер телдә генә яҙыла).

Көрәш юлының өсөнсөһө

- Башҡорт теле һүҙлектәрен яңыртыу.
- Урыҫ теленән үҙләштерелеп, шул айҡанлы ҡыҫырыҡлап сығарылған башҡорт һүҙҙәрен кире ҡайтарыу. Былар бик күп. Хәҙерге ваҡытта хатта, википедияла ла урыҫлашҡан терминдар ҡулланыла башланы
- Башҡортостан китап нәшриәтендә башҡортса китаптар баҫтырыуҙы арттырыу

Һығымта

- Минең фекеремсә, ошо маҡсаттарҙы бойомға ашырһаҡ, башҡорт телен һәм милләтен һаҡлап ҡалыуҙа ҙур ғына боролош булыр ине
- Республикала төньяҡ диалектта һөйләшкәндәрҙе «һин татар» тип йөрөтөүҙәр кәмер. Халҡыбыҙ асылына ҡайтыр тигән ышаныстамын
- Беҙҙең милләт йөмһүриәтебеҙҙә күпселекте тәшкил итер ине